Башҡортостан Республикаһының муниципаль район Учалы районының Исхаков А.С. исемендәге Уральск ауылы муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы урта дөйөм белем биреү мәктәбе

“Ҡаралды”
МБ етәксеһе
……Р.Р.Камалова
Протокол №_N1
“28” ___08____ 2017 й.

“Килешелде”
Директор урынбаҫары
……..Д.Ә.Сәйетхужина
“31” ___08____ 2017 й.

“Раҫлайым”
Мәктәп директоры
……Л.А.Рәхмәтуллина
Приказ №_213_
“31” ___08____ 2017 й.

# 10-11 синыфтары өсөн
# “Туған теле һәм әҙәбиәте” дәресенән
# уҡытыу программаһы

## База кимәле

## 10-сы синыф

## Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар

Художество әҫәрҙәре ( шул иҫәптән драма әҫәрҙәрен) тасуири уҡыу. Уҡылған әҫәрҙәрҙе йәки уларҙың өҙөктәрен яҙма йәки телдән һөйләп биреү. Өйрәнелә торған әҫәр буйынса телдән һәм яҙма рәүештә фекер йөрөтөү характерындағы инша яҙыу, һорауҙарға тулы яуап биреү.

Яҙма йәки телдән сығыш яһау өсөн план төҙөй белеү.

Бирелгән тема буйынса диалог төҙөү, диалогты дауам итә белеү;

Тексты икенсе телгә тәржемә итеп һөйләү;

14-16 шиғырҙы яттан тасуири итеп һөйләй белеү.

Тексты мәғәнәүи өлөштәргә бүлеү, уларға исем биреү, план төҙөү;

Газет- журналдарҙан, китаптарҙан материал йыйып, хикәйә төҙөү;

Әҫәрҙән кәрәкле өлөштәрҙе һайлап ала белеү.

Һүҙбәйләнеш, һүҙбәйләнештә эйәртеүсе һәм эйәрсән киҫәктәрен ( аныҡлаусы, хәлдәр) айыра белеү.

**11-се синыф**

**Уҡыусыларҙың  белем кимәленә талаптар.**

Художестволы, фәнни-популяр һәм публицистик текстарҙы ҡысҡырып етеҙ уҡыу.

Тәкдим ителгән ситуация буйынса һорауҙар бирә белеү, уҡытыусының (йәки башҡаларҙың) һорауҙарына яуап бирә белеү; яуаптарҙы дөрөҫ интонация менән асыҡ, аңлайышлы итеп әйтеү, һөйләү.

Яҙма йәки телдән сығыш яһау өсөн план төҙөй белеү.

Үҙ аллы  уҡылған әҙәби сәнғәт әҫәрҙәренә яҙма йәки телдән баһалама бирә белеү.

Художестволы әҫәрҙәрҙе, фәнни-популяр һәм публицистика әҫәрҙәрен айыра белеү.

Яҙыусы һүрәтләгән художестволы картиналарҙы уй менән күҙ алдына баҫтырыу; бирелгән тема, һүрәт, картина буйынса һөйләй белеү.

Өйрәнелә торған  әҫәр буйынса телдән һәм яҙма рәүештә фекер йөрөтөү характерындағы инша яҙыу, һорауҙарға тулы яуап биреү, геройҙарға индивидуаль, сағыштырма, төркөмләп характеристика биреү.

Программала күрһәтелгән шиғырҙарҙы яттан белеү; тексты икенсе телгә тәржемә итеп һөйләү.

Билдәле эйәле, билдәһеҙ эйәле, эйәһеҙ һөйләм, дөйөм эйәле һәм атама һөйләмдәрҙе айыра белеү;  кешенең эске донъяһын, тәбиғәттең төрлөсә торошон, төрлө хәл-ваҡиғаларҙы ҡыҫҡа ғына һүрәтләү өсөн бер составлы һөйләмдәрҙе файҙалана белеү.

**10-сы синыф**

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе**

**(башҡорт теле)**

**1. Белем көнө.**

1 сентябрь- Белем көнө, Ватан, тыныслыҡ, мәктәп, уҡыу һәм уға мөнәсәбәт тураһында текстар уҡыу дауам итә. Уҡыусыларҙың телмәрен үҫтереү өҫтөндә эш даими дауам итә.

Мәктәп, Тыуған ил, тыуған төйәк хаҡында әңгәмәләр үткәреү.

Грамматика:

9-сы класта үтелгәнде ҡабатлау.

Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:

Күңел, һағыныу, тойғо, ғәзиз, күңелле, моң, төркөм, кәңәш, онотолоу, иҫтән сығыу, ғүмер, ҡыңғырау, мәктәп йылдары, заман, имтихан, хөрмәт, рөхсәт, һуңынан, бәхет, йүләр, кәйеф, бөтһе, дөрөҫ юл һайлау.

**2. Башҡортостан ҡоштары.**

Башҡортостан ҡоштары, уларҙың көн итеүҙәре , һәр ҡош төрөнөң үҙенсәлекле яҡтары менән таныштырыу. Яҙыусы, шағирҙарҙың ҡоштар тураһында яҙған әҫәрҙәрен уҡыу. Улар ярҙамында уҡыусыларҙың һүҙлек байлығын арттырыу, телмәр үҫтереү. Башҡортостанда ҡышлаусы һәм осоусы ҡоштарға ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

Грамматика:

Исемдең 1-се зат ялғауҙары.

Бер составлы һөйләмдәр.

Сифат дәрәжәләре.

Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:

Ҡоштар, ҡанат, ҡауырый, ҡарлуғас, һандағас, сәпсек, аҡ сәпсек, сәүкә, һайыҫҡан, һуйыр, ҡор, сел, ҡоҙғон. кәкүк, тумыртҡа, сыйырсыҡ, турғай, ҡарға, торна, бүҙәнә, бөркөт, ҡарсыға, төйлөгән, ҡарабаш турғай, һабантурғай, күгәрсен, файҙалы, ҡорт, зарарлы.

**3. Башҡорт йолалары, ғөреф- ғәҙәтләре, әҙәп ҡәғиҙәләре.**

Башҡорт халҡының һаҡланып, быуындан-быуынға тапшырылып килгән йолалары, ғөреф-ғәһәттәре, әҙәп-ҡағиҙәләре менән таныштырыу, улар тураһында һөйләргә өйрәтеү. Һәр йоланың үҙенсәлекле яҡтарын билдәләү, башҡорт халыҡ йолаларын башҡа халыҡ йолаларынан айырмалы яҡтарын билдәләй белеү. Күренекле шәхестәрҙең фәһемле һүҙҙәре, яҙыусы, шағирҙарҙың әҫәрҙәре менән танышыу.

Грамматика:

Бер һәм ике составлы һөйләмдәр.

Алмаштың килеш менән үҙгәреүе.

Ҡылымдың заман формалары.

Алмаш төркөмсәләре.

Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:

Йола, ғөрөф-ғәҙәт, әҙәп ҡағиҙәләр, ғаилә, тәрбиә, донъяға ҡараш, тыйыуҙар, тәртип, ғәҙәт, аралашыу, ҡунаҡсыллыҡ, бойороҡ, йомарт, сабырлыҡ, ололау, тыйнаҡ, намыҫлы, ышанызлы, һаҡлау, әссәләмәғәләйкүм, хәйерле көн (иртә. кис) , оҙон ғүмерле булһын! Ҡотло булһын! Еңел аяғың менән! Ҡул-аяғың еңел булһын! Һабантуй, ҡарға буҡкаһы, кәкүк сәйе, өмә. Ҡаҙ өмәһе. Һаумыһығыҙ,ауылдаштар! Аулаҡ өй, кис ултырыу.

**4. Башҡортостанда ҡыш**

Башҡортостанда ҡыш, уның билдәләре, балаларҙың ҡышҡы уйындары һәм байрамдары тураһында уҡыу. Тәбиғәтте күҙәтеү, ҡыш йәнлектәр һәм ҡоштар тормошо тураһында уҡыу, һөйләү, танышыу. Был турала уҡыусыларҙы дөрөҫ. Аныҡ. Тулы итеп һөйләрәгә өйрәтеү маҡсатын тормошҡа ашырыу өҫтөндә даими эш алып барыу.

Грамматика:

Һөйләмдең айырымланған эйәрсән киҫәктәре.

Алмаштың килеш менән үҙгәреүе.

Ҡылым формалары.

Ҡушма ҡылымдар.

Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:

Ынйы, ғәжәп, хайран ҡалыу, һуйыр,  илгәҙәк, ҡоралай, юллатыу, шәм, бәҫ, тылсымлы, селтәрле, әңгәмә, тамаша, тантана, шыршы, саңғы, көрт, һырғалаҡ өйөү, һунар, өң, эҙ, айыу, ҡышҡы йоҡо, мылтыҡ, һыуыҡ,буран, өйөрмә, ҡояш байыйый.

Диалог темалары:

Тауҙа уйнағанда.

Яңы йыл байрамы.

Ҡыш һауа торошо.

Ҡыш тураһында һынамыштар, мәҡәл, әйтемдәр, йомаҡтар.

**4. Беҙҙең өсөн иң ҡәҙерле байрам.**

Ҡатын- ҡыҙҙар, һөйөклө әсәйҙәр тураһында һөйләшеү, уларға ҡарата  хөрмәт, уларға иғтибарлы, ихтирамлы булыуҙы тәрбиәләү.

Грамматика:

Ҡылымдарҙың башланғыс формаһы.

Элек, хәҙер, тормош, илау, сәңгелдәк йыры, иртә, наҙлы, ҡайғы килтереү, яратҡан, ғәҙел, хыял, хыялланыу, лайыҡ, мохтаж, батырлыҡ, серләшеү.

**5. Һөнәрҙәр.**

Грамматика:

Ҡушма ҡылымдар.

Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:

Һөнәр, кәсеп, теләк, һайлау, оҫта, ялҡау, егәрле, уңған, үҙ эшен ярата, эшһөйәр, ҡулы оҫта, алтын ҡуллы, етеҙ, бейеүсе, йырсы, сәхнә оҫтаһы, быҙау ҡараусы, һауынсы, үлсәү, һыйыр һауыу, иртә, йылмайыу.

**6.Башҡортостандың иҫтәлекле урындары**

Башҡортостандың күренекле урындары тураһында уҡыусыларҙы һөйләргә өйрәтеү. Уҡыусыларға ла Башҡортостан Республикаһындағы данлыҡлы урындар тураһында материалдар йыйҙырыу, улар буйынса башҡорт телендә уҡыусылар менән уртаҡлаштырыу. Уҡыусыларҙа үҙ республикаһына , тыуған төйәккә ҡарата ғорурлыҡ тойғоһо тыуҙырыу.

Грамматика:

Тура телмәрле һөйләмдәр.

Эш-хәрәкәт һәм эшмәкәрлек ҡылымдары.

Телмәр ҡылымдары. Өн оҡшатыу ҡылымдары.

Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:

Мәмерйә, иҫтәлек, иҫтәлекле урын, тарих, һүрәт, баҫҡыс, быуат, таш кимтеге, тәрәнлек, боҙ, мәңгелек, осор, ҡарауылсы, музей, солоҡсолоҡ, һунарсылыҡ, кәшәнә, ғалимдар, мираҫ, тәбиғи ҡомартҡы, раҫлау, бейеклек, төрөү, баҫҡыс тотыҡҡан, өҫкө ҡат, донъя күләмендә.

**8. Башҡорт музыка ҡоралдары.**

Башҡорттарҙың рухи һәм материаль культураһында халыҡ музыка коралдарының әһәмиәтле урын алып тороуы менән таныштырыу.. Ул өлкәлә данлыҡлы кешеләрҙең тормош юлы һәм ижады менән танышыу. Улар тураһында уҡыусыларҙың дөрөҫ итеп һөйләүенә өлгәшеү.

Грамматика:

Бәйләүестәр. Ҡушма исемдең яһалышы.

Ҡылымдың киләсәк заманы.

Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:

Рухи донъя, музыка ҡоралдары, милли көй, башҡорт композиторҙары, боронғо ҡурай, ҡумыҙ, думбыра, ҡыл ҡумыҙ, һорнай, дөңгөр, мәғлүмәт, элек,

быуат, сәсән, юлдаш, ил батырҙары, дан, тыуған ер, батша, хөкүмәт, ижад, өйрәнеү, тырышыу, яратыу, йырларға яратыу, көй сығарыу, композитор, үҙешмәкәр, йыр буйынса ярыш уҙғарыу, бер аҙ, талантлы, үткән йыл, Өфө сәнғәт институты, халыҡ артистары.

**9. Бигерәк йәмле йәй көндәре.**

Бәйләнешле телмәр үҫтереү буйынса төрлө эш төрҙәре үткәреү. Йәй миҙгеле, байрамдар, һуңғы кыңғырау шылтырауы, йәйге ял темаһы буйынса әңгәмәләр үткәреү, текстар уҡыу.

Грамматика.

Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр.

Ҡыңғырау, оя, йорт, таныш исем, заман, ваҡыт, имтихан, бурыс, өлкән, юл, һанау, маҡсат, ашхана, таң, төндә, серҙәш, бөҙрә, яңғыҙ,бер үҙе, бер кем дә, кеҫә, ҡулъяулыҡ, ялҡын, ял итеү, бейек, юғары, бөйөк, тәлгәш, тапшырыу, намыҫ, васыят, хәтерҙә, иҫтә, өмөт, ышаныс, ғорур.

**10-сы синыф**

**Календарь-тематик план (башҡорт теле)**

| № п/п | Тема | сәғәт | Дата | | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | план | үткәрелде | |
| Белем көнө-6 | | | | | |
| 1. | Мәктәп юлы. С. Әлибай Башҡорт теленең үҫенсәлекле өндәре. | 1 | | | |
| 2. | Һәҙиә Дәүләтшина. Ырғыҙ. | 1 | | | |
| 3. | Һәҙиә Дәүләтшина. Ырғыҙ. | 1 | | | |
| 4. | Башҡорт телендә һыҙынҡы өндәре. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| 5. | Беренсе сентябрь. З. Биишева Һүҙ төркөмдәре. | 1 | | | |
| 6. | Р. Ә. Сафин. Ерем моңо. Һандар. Исем. | 1 | | | |
| Башҡортостан ҡоштары-6 | | | | | |
| 7. | Сыңрау торна. Ҡоштар беҙҙең дуҫтар Сифат.. | 1 | | | |
| 8. | Тәржемә өсөн күнегеүҙәр. Ҡош юлы. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. | 1 | | | |
| 9. | Кәкүк. Һандуғасты һағынып Бер составлы һөйләмдәр.. | 1 | | | |
| 10. | Ҡыҙылтүш. А. Йәғәфәрова Билдәле эйәле һөйләмдәр.. | 1 | | | |
| 11. | Диктант. | 1 | | | |
| 12. | Ҡарҙағы яҙыуҙар. Эйәһеҙ һөйләм. | 1 | | | |
| Башҡорт йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәре. Әҙәп ҡағиҙәләре-4 | | | | | |
| 13. | Һаулыҡ һораша беләһегеҙме? | 1 | | | |
| 14. | Ҡунаҡ ашы.Баш һәм | 1 | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | эйәрсән киҫәктәр. | | | | |
| 15. | Килен ҡаршылау. Эйә менән хәбәрҙең бирелеше. | 1 | | | |
| 16. | Ҡунаҡ ҡаршылау. | 1 | | | |
| Башҡортостанда ҡыш-2 | | | | | |
| 17. | Тәүге ҡар. Һөйләмдең айырымланған эйәрсән киҫәктәре. | 1 | | | |
| 18. | Эҙҙәр. Тултырыусыларҙың айырымланыуы. | 1 | | | |
| Беҙҙең өсөн иң ҡәҙерле байрам-2 | | | | | |
| 19. | Аныҡлаусыларҙың айырымланыуы. Әсә моңо. | 1 | | | |
| 20. | Әсә. Ҡылымдарҙың башланғыс формаһы. | 1 | | | |
| Һөнәрҙәр-2 | | | | | |
| 21. | Айырылмаған хәл. Хәл әйтеменең айырымланыуы. | 1 | | | |
| 22. | Игенесе. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| Башҡортотостандың иҫтәлекле урындары-3 | | | | | |
| 23. | Тура телмәрле һөйләмдәр. Башҡортостандағы иң ҙур мәмерйә. | 1 | | | |
| 24. | Эш-хәрәкәт эшмәкәрлек ҡылымдары. Башҡортостан ҡурсаулығы. | 1 | | | |
| 25. | Карауанһарай. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| Башҡорт музыка ҡоралдары-5 | | | | | |
| 26. | Башҡорт музыка ҡоралдары. Башҡорт телендә һөйләм төҙөлөшө. | 1 | | | |
| 27. | Ҡурайҡайға. Ш. Бабич. | 1 | | | |
| 28. | Думбыра сыңы. | 1 | | | |
| 29. | Ҡурайсы. Интонация буйынса һөйләм төрҙәре. | 1 | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 30. | Диктант | 1 | | | |
| Бигерәк йәмле йәй көндәре-4 | | | | | |
| 31. | Һабантурғай.<br>Р. Ғарипов.Һүҙ төркөмдәре. Исем. | 1 | | | |
| 32. | Умырзая -яҙ күрке. | 1 | | | |
| 33. | Р. С. Назаров. Йәшен | 1 | | | |
| 34. | Тере барометрҙар. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |

**10 синыф**

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе**

**(башҡорт әҙәбиәте)**

***Башҡорт совет осоро әҙәбиәтенең формалашыуы(1917-1929йылдар)***Яңы осор әҙәбиәтенең социаль-тарихи ерлеге,уның йүнәлешетәре.Тәүге драмалар.20-се йылдарҙа проза,поэзия,драматургияның үҫеше.*Әҙәбиәт теорияһы.*Әҙәби процесс.
***Д.Юлтый.***Биографияһы,эшмәкәрлеге.Шиғырҙары,поэмалары.”Ҡарағол”драмаһы,”Ҡан”романы.
*Әҙәбиәт теорияһы.Художестволы әҙәбиәттең теле.*
***Ә.Вәлиди.***Тормошо,дәүләт эшмәкәрлеге.Ғалимлығы.Китаптары.”Хәтирәләр”ҙең жанр,стиль үҙенсәлеге.
***М.Буранғолов.***Тормош юлы,эшмәкәрлеге.М.Буранғолов-сәсән,фольклорсы.М.Буранғол-драматург.”Башҡорт туйы”драмаһы.
***Ғ.Хәйри.***Биографияһы.Проза әҫәрҙәре.”Боролош”романы.Тарихи осор,төп проблемалары,образдары.
***Утыҙынсы йылдар әҙәбиәте.***Был йылдарҙа әҙәбиәттә төп тематика,Поэзия.Проза.Драматургия.Репрессияға эләккән яҙыусылар.
***Һ.Дәүләтшина****.*Яҙыусының фажиғәле яҙмышы,ҡаһарманлығы.Башланғыс ижады.Хикәйәләре.”Айбикә”повестары.”Ырғыҙ”романының яҙылыу тарихы,идея-тематик йөкмәткеһе.Романда күтәрелгән төп проблемалар,төп образдар.
*Әҙәбиәт теорияһы.*Әҙәби тип.Прототип.Роман-эпопея.
***Әҙәби портреттар.С.Мифтахов****.*”Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт”драмаһының идея-тематик йөкмәткеһе.
***Ғ.Сәләм.***”Бала”поэмаһы.Ғаилә,бала тураһында.Сәйҙел менән Зәйнәп образдары.Поэманың художестволы үҙенсәлектәре.
***Бөйөк Ватан һуғышы йылдары әҙәбиәте.***Был осорҙа әҙәбиәттең бурыстары,үҙенсәлеге.Оператив жанрҙар.Публицистик поэзия.Очерк жанры.Хикәйәләр,поэма,балладалар.
Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған яҙыусылар.
***Р.Ниғмәти.***Яҙыусының тормошо һәм ижады.Башланғыс ижады.Утыҙынсы йылдар поэзияһы. Бөйөк Ватан һуғышы йылдары поэзияһы.”Үлтер,улым,фашисты!”,”Һинең кәләшеңдең хаттары”.Һуғыштан һуңғы йылдар ижады. “Һаҡмар ҡыҙы” поэмалары.
*Әҙәбиәт теорияһы.*Лирик герой тураһында төшөнсә.
***Баязит Бикбай.***Биографияһы һәм ижад юлы.”Ҡарлуғас”драмаһы. Бөйөк Ватан һуғышы йылдары ижады.Очерктары. Һуғыштан һуңғы йылдар ижады.Проза.”Аҡсәскә”повесы.”Салауат”драмаһы.
*Әҙәбиәт теорияһы.*Тема.

***З.Биишева.*** Биографияhы hәм ижад юлы.Шиғырҙары.Повестары.”Тылсымлы ҡурай”драмалары.
Трилогия.”Яҡтыға” трилогияhының идея-тематик йөкмәткеhе.Сағылған осор,күтәрелгән проблемалар,образдар системаhы.Халыҡтың азатлыҡ өсөн көрәше.Художестволы үҙенсәлектәре.
***Һуғыштан һуңғы осор әҙәбиәте.***Башҡорт әҙәбиәтенә ҡылыҡһырлама.Поэзия.Проза.Драматургия.
Башҡорт яҙыусыларының икенсе съезы.
***Н.Нәжми***.Биографияhы.,йәмәғәт эшмәкәрлеге. Бөйөк Ватан hуғышы йылдары ижады. Һуғыштан hуңғы йылдар ижады. Поэма hәм балладалары.”Урал”поэмаhы.”Шағир hәм шаh”Патриотзм,власть hәм талант проблемалары.Драматургия.
***Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.***

***Ятлау өсөн әҫәрҙәр.***

***Д.Юлтый.***”Атлан,батыр!”,”Ҡарағол”драмаhынан өҙөк.
***М.Буранғолов.***”Башҡорт туйы”драмаhынан өҙөк.
***Ғ.Сәләм.***”Бала”поэмаhынан өҙөк.
***Һ.Дәүләтшина***.”Ырғыҙ”романынан өҙөк.
***Р.Ниғмәти***.”Үлтер,улым,фашисты!”поэмаhынан өҙөк.

***Кластан тыш уҡыу өсөн әҫәрҙәр.***
С.Агиш.”Фәтхи hалдат”хикәйәhе.
Я.Хамматов.”Башҡорттар китте hуғышҡа”романы.
Т.Килмөхәмәтов.”Ҡорбан килтереү”портреттар.
“Һуғыш үтте,hағыш ҡалды”очерктар,хәтирәләр.

**10-сы синыф**
**Календарь-тематик план (башҡорт әҙәбиәте)**

| № | Тема | сәғәт | Планл. дата | Фак тик дата | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| ***Башҡорт совет әҙәбиәте-1*** | | | | | |
| 1. | Инеш.XX быуат әҙәбиәте.<br>Совет әҙәбиәте-башҡорт әҙәбиәтенең яңы осоро. | 1 | | | |
| ***Дауыт Юлтый-3*** | | | | | |
| 2. | Д.Юлтыйҙың тормошо һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге | 1 | | | |
| 3. | Д.Юлтый-драматург.”Ҡарағол”драмаһы. | 1 | | | |
| 4. | “Ҡан”романы | 1 | | | |
| ***Әхмәтзәки Вәлиди Туған-2*** | | | | | |
| 5. | Тормошо һәм дәүләт эшмәкәрлеге.<br>Эмиграция осоро.Ә.ВәлидиТуған-ғалим. | 1 | | | |
| 6. | “Хәтирәләр”китабы. | 1 | | | |
| ***Мөхәммәтша Буранғолов-2*** | | | | | |
| 7. | М.Буранғол.Тормош юлы,төрлө өлкәләге .эшмәкәрлеге | 1 | | | |
| 8. | “Башҡорт туйы”драмаһы. | 1 | | | |
| ***Ғайнан Хәйри-2*** | | | | | |
| 9. | Ғайнан Хәйри-шағир.Тәүге ижад осоро. | 1 | | | |
| 10. | “Боролош”романы. | 1 | | | |
| ***Һәҙиә Дәүләтшина-3*** | | | | | |
| 11. | Һәҙиә Дәүләтшинаның фажиғәле яҙмышы һәм ҡаһарманлығы. | 1 | | | |
| 12. | “Ырғыҙ”романы. | 1 | | | |
| 13. | “Ырғыҙ”романы. | 1 | | | |
| ***Әҙәби портреттар-2*** | | | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | |
| 14. | С.Мифтахов.”Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт”драмаһы. | 1 | | | |
| 15. | Ғ.Сәләм.Тормошо,ижады.“Бала”поэмаһы . | 1 | | | |
| ***Рәшит Ниғмәти-3*** | | | | | |
| 16. | Шағирҙың тормош юлы һәм башланғыс ижады. | 1 | | | |
| 17. | Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы ижады.<br>“Үлтер,улым,фашисты!”поэмаһы. | 1 | | | |
| 18. | Һуғыштан һуңғы йылдар ижады.<br>“Һаҡмар ҡыҙы”поэмаһы. | 1 | | | |
| ***Баязит Бикбай-3*** | | | | | |
| 19. | Яҙыусының биографияһы.Утыҙынсы йылдарҙағы ижады. | 1 | | | |
| 20. | “Ҡарлуғас”драмаһы | 1 | | | |
| 21. | “Аҡсәскә”повесы. | 1 | | | |
| ***Зәйнәб Биишева-6*** | | | | | |
| 22. | Яҙыусының тормошо һәм ижад юлы. Шиғырҙары | 1 | | | |
| 23. | Повестары. | 1 | | | |
| 24. | Драма әҫәрҙәре.”Тылсымлы ҡурай”. | 1 | | | |
| 25. | “Кәмһетелгәндәр” | 1 | | | |
| 26. | “Оло Эйек буйында” | 1 | | | |
| 27. | “Емеш”романдары. | 1 | | | |
| ***Һуғыштан һуңғы осор әҙәбиәте-1*** | | | | | |
| 28. | Һуғыштан һуңғы осор әҙәбиәте. | 1 | | | |
| ***Назар Нәжми-6*** | | | | | |
| 29. | Шағирҙың тормошо һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге. Бөйөк Ватан һуғышы | 1 | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | йылдарындағы ижады. | | | | |
| 30. | Һуғыштан  һуңғы осор ижады. | 1 | | | |
| 31. | Поэма һәм балладалары.<br>“Йыр тураһында баллада” | 1 | | | |
| 32. | *Кластан тыш укыу*.”Дуҫ тураһында ун ике йыр”поэмаһы. | 1 | | | |
| 33. | “Урал”,”Шағир һәм шаһ” поэмалары. | 1 | | | |
| 34. | Драма әҫәрҙәре. | 1 | | | |

## 11 –се синыф

## Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе(башҡорт теле)

### Тыуған илем – Башҡортостан

Башҡортостан, Башҡортостан Республикаһының Рәсәй кимәлендә тотҡан урыны, уның байлығы, күренекле шәхестәре, халҡы, батырҙары, сәнғәте хаҡында текстар уҡыу, әңгәмәләр, осрашыуҙар, экскурсиялар ойоштороу. 11-се класс уҡыусылары уҡығандары дөрөç, шыма итеп һөйләй белергә, әңгәмәлә еңел ҡатнаша, аралаша алырға тейеш. Диалогик, монологик телмәр менән эш итә белеүгә өлгәшергә кәрәк.

Грамматика:10-сы класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

### Башҡортостан сәнғәте

Башҡортостан Республикаһында сәнғәт үçеше. Сәнғәт әһелдәре, улар хаҡында яҙылған текстар менән танышыу. Грамматика буйынса үҙләштерелгән материалды ғәмәлдә дөрөç ҡулланыуға өлгәшеү. Был тема буйынса уҡытыусынан һәм уҡыусыларҙан да ижади эш талап ителә.

Грамматика:Бер составлы һөйләм төрҙәре.

### Кемдәр улар сәсәндәр?

Сәсәндәрҙең йәмғиәт тормошонда тотҡан урындары, уларҙың халыҡ шағирҙары, педагогы, тарихсыһы, ил-йорт аҡһаҡалы булыуы тураһында таныштырыу. Сәсәнлек сәнғәте. Исемдәре билдәле һәм әçәрҙәре хәҙергәсә һаҡланған сәсәндәр (Ҡобағош сәсән, Ҡарас сәсән, Ерәнсә сәсән, Буранбай – Йәркәй сәсән). Сәсәндәр ижадында фольклор һәм әҙәбиәт традициялары сағылышы.

Грамматика:Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр.

### Башҡорт ырыуҙары,шәжәрәләре.

Башҡорт халҡының ырыуҙары менән танышыу. Башҡорт шәжәрәләренең яҙма ҡомартҡы булараҡ матур әҙәбиәткә мөнәсәбәте. Уҡыусыларҙың үҙ ырыу шәжәрәһен төҙөтөү, улар тураһында һөйләй белеү.

Грамматика:Ҡушма һөйләмдәр (ҡабатлау).

Башҡорт халыҡ шағирҙары, яҙыусылары Башҡорт халыҡ шағир-яҙыусылары тураһында белешмә. Уларҙың тормош һәм ижад юлы менән таныштырыу. Уҡыусылар һәр шағир, яҙыусы хаҡында һөйләй белергә һәм уларҙың әҫәрҙәрен танып атай белергә тейеш. Бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү; текст өҫтөндә эшләүгә иғтибар арттырыу.

Грамматика: Эйә һөйләм. Эйәрсән хәбәр һөйләм.

**11-се синыф**

**Календарь-тематик планлаштырыу(башҡорт теле)**

| № п/п | Тема | сәғәт | План-ған | Үтк-гән | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | ***Тыуған илем – Башҡортостан-6*** | | | | |
| 1. | М.Кәрим. Ҡайын япрағы тураһында. | 1 | | | |
| 2. | Ғ.Дәүләтов. Ағиҙел. Ике составлы һөйләмдәр. | 1 | | | |
| 3. | Д.Мырҙаҡаева. Алтын ай. З.Ураҡсин. Бөгөлөү. | 1 | | | |
| 4. | Р.Йәнбәк. Мәңге балҡы, Башҡортостан! | 1 | | | |
| 5. | Ер рухы. Текст төҙөү. Йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр. | 1 | | | |
| 6. | Ғ.Рамазанов. Тыуған еребеҙ – Башҡортостан! | 1 | | | |
| | ***Башҡортостан сәнғәте -4*** | | | | |
| 7. | Р.Әфләтунов. Башҡорт бейеүе. | 1 | | | |
| 8. | Өс быуатлыҡ тарих. Дуҫлыҡ һәйкәле. | 1 | | | |
| 9. | Диктант. | 1 | | | |
| 10. | Н.Мусин. Ижадҡа арналған ғүмер. | 1 | | | |
| | ***Кемдәр улар сәсәндәр? -2*** | | | | |
| 11. | Б.Вәлид. Сәсәндәр. | 1 | | | |
| 12. | Ҡонҡас сәсән. | 1 | | | |
| | ***Башҡорт ырыуҙары, шәжәрәләре-2*** | | | | |
| 13. | Ете ырыу. С.Галин. | 1 | | | |
| 14. | Шәжәрә. | 1 | | | |
| | ***Башҡорт халыҡ шағирҙары, яҙыусылары-5*** | | | | |
| 15. | М.Ғафури. Бир ҡулыңды. | 1 | | | |
| 16. | Йәйге ямғыр. Р. Ниғмәти. | 1 | | | |
| 17. | Ҡыр ҡаҙҙары. | 1 | | | |
| 18. | Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов. | 1 | | | |
| 19. | Хаталар өҫтөндә эш. Н.Нәжми. Һинең ниндәй улыңмын мин… | 1 | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | ***Башҡорт халыҡ шағирҙары, яҙыусылары -2*** | | | | |
| 20. | Р.Бикбаев. Яңғыҙлыҡ.<br>Ғ.Дәүләтшин. Ҡар. | 1 | | | |
| 21. | Ә.Атнабаев. Әсәйемә. | 1 | | | |
| | ***М.Кәрим ижады һәм тормош юлы-4*** | | | | |
| 22. | Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим. Ҡоштар осорам. | 1 | | | |
| 23. | Оҙон-оҙаҡ бала саҡ. | 1 | | | |
| 24. | Уҡытыусыма. М.Кәрим шағир-уҡытыусы. | 1 | | | |
| 25. | Изложение. Ете ырыу. | 1 | | | |
| | ***Зәйнәб Биишева ижады һәм тормош юлы-4*** | | | | |
| 26. | Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева. Дуҫтарға. | 1 | | | |
| 27. | Зәйнәб Биишева. Уйҙар. | 1 | | | |
| 28. | **Диктант.** | 1 | | | |
| 29. | Хаталар өҫтөндә эш. Теләк. | 1 | | | |
| | ***Яҙыусылар, шағирҙар ижады менән таныштырыу-4*** | | | | |
| 30. | М.Кәримов. Фасылдар. | 1 | | | |
| 31. | З.Әхмәтйәнова. Май айы. | 1 | | | |
| 32. | Ф.Мырҙаҡаев. Татыулыҡҡа тау ҙа ҡыҙыҡҡан. | 1 | | | |
| 33. | Ә.Хәкимов. Аҡҡужа. | 1 | | | |
| | ***Бигерәк йәмле йәй көндәре-1*** | | | | |
| 34. | З.Ханнанова. Хуш, мәктәбем! | 1 | | | |

## 11 –се синыф

## Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе(башҡорт әҙәбиәте)

**Хәҙерге әҙәбиәт**

Егерменсе быуаттың икенсе яртыһында йәмғиәттәге үҙгәрештәрҙең әҙәбиәткә йоғонтоһо.Яңы быуын шағирҙарының яңы ижади табыштары.

Мостай Кәрим

Мостай Кәримдең биографияһы һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы ижады. Мөхәббәт һәм нәфрәт темаһы.Һуғыштан һуңғы ижадында хеҙмәткә,бәхетле, тыныс тормошҡа дан йырлау.

Ҡара һыуҙар поэмаһында төп темаларҙың контраст бирелеүе:һуғыш һәм тыныслыҡ,батырлыҡ һәм ҡурҡаҡлыҡ.

Фәлсәфәүи шиғырҙарында тормош ,яҙмыш тураһында уйланыуҙары.

Оҙон-оҙаҡ бала саҡ повесында әҙәп-әхлаҡ проблемаһының ҡуйылышы.Повеста йәмғиәттең,ғаиләнең роле.Әҫәрҙең жанр үҙенсәлектәре.

Ай тотолған төндә трагедияһында башҡорт ырыуҙары көнкүрешенең һүрәтләнеүе.Трагедияның жанр үҙенсәлектәре.

Трагедияларында азатлыҡ өсөн көрәш идеяһының сағылышы.Трагедияның драматик эшләнеше,поэтик теле һәм стиле.

Рәми Ғарипов

Р.Ғариповтың биографияһы һәм ижады.

Тыуған төйәккә ,хеҙмәткә дан йырлау.

Лирик шиғырҙарының тематикаһы.Шиғри хикәйәт һәм ҡобайырҙары. Шиғри хикәйәтендә Башҡортостан , ир-егеттәр образы.

Ҡобайырҙары.Тыуған ил,халыҡ яҙмышы, ил улдары тураһында уйланыуҙары.

Поэмалары . Шәхес культы йылдарында ил, халыҡ,милли интелигенцияның эҙәрлекләнеүе фажиғәһен күрһәтелеүе.

Донъя һәм мөхәббәт темалары. Поэтик эшләнеше.

Әхиәр Хәким

Ә.Хәкимдең биографияһы һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге.

Ә.Хәким-романист. Өйөрмә романында утыҙынсы йылдар фажиғәһе.Репрессияға юлыҡҡан башҡорт интеллегенцияһы,яҙыусылары яҙмышының һүрәтләнеше.

Символик мәғәнәле өйөрмә образы.Тоталитар режимдың сағылышы.

Ғайса Хөсәйенов

Әҙиптең биографияһы һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге.

Парсаларында тормош тураһында уйланыуҙары.

“Рудасы Исмәғил Тасим улы” тарихи-документаль повесын үҙләштереү,төп идеяһын асыҡлау.Унда ҡаһарманлыҡһәм фажиғә,киләсәкте ҡайғыртыу мотивтары.

“Ҡанлы илле биш” тарихи тематикалы роман.Романдың йөкмәткеһен үҙләштереү.

Рауил Бикбаев

Тормош юлы һәм фәнни эшмәкәрлеге.

“Ғүмер уртаһы” шиғырында халыҡ,тыуған ил,ғүмер тураһындағыуйҙары.

“Һыуһаным-һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһында социаль,иҡтисади,экологик һәм мораль-этик проблемаларҙың ҡуйылышы.

“Ете быуыным” ,”Салауат ҡылысы” шиғырҙарында милләттең изге аманаты,рухи байлығы,йолалары сағылышы.

“Бөрйән ҡарағайы”, “Бикбай менән Бикбай һөйләшеүе” шиғырҙарында замана,мораль-этик мәсьәләләр.

Ноғман Мусин

Яҙыусының биографияһы һәм ижады.Тәүге хикәйәләре.

“Ауылым юлы” повесының тематикаһы.Әҫәрҙә мораль-этик проблема.Кешенең тәбиғәткә,хеҙмәткә мөнәсәбәте.

“Мәңгелек урман” романында сағылдырылған тарихи осор. Уның ҡаршылыҡтары. Геройҙарҙың яҙмышы аша халыҡтың социаль, милли-колониаль иҙелеүен һүрәтләү.Романдың художество эшләнеше,композицияһы.

“Шайтан ҡуласаһы” повесында ғаилә,мөхәббәт бала тәрбиәләү,әҙәп,әхлаҡ проблемалары.

Азат Абдуллин

Яҙыусының биографияһы,ижад юлы.

Ун өсөнсө председатель драмаһының идея-тематик йөкмәткеһе.Драмала әҙәп-әхлаҡ мәсьәләһе.Әҫәрҙең популярлығы.мәскәүҙә Вахтанов исемендәге театрҙа ҙур уңыш менән барыуы.

Рәшит Солтангәрәев

Яҙыусының тормошо һәм ижады.

“Хамбал” хикәйәһендә Бөйөк Ватан һуғышы килтергән aслыҡ һәм ауыр тормоштоң һүрәтләнеүе. Яуыз Хамбал образы,уның фажиғәле үлеме.

“Ҡиәмәтлек кейәү” хикәйәһендә оҙаҡ йылдар улын көткән ҡарт әсә образы.Уның уй-һағыштары.Хикәйәләге психологизм. Әҫәрҙең художество үҙенсәлеге.

Динис Бүләков

Яҙыусының тормошо һәм ижады.

“Килмешәк” романының идея-тематик йөкмәткеһе.Унда ижтимағи,иҡтисади,мораль-этик мәсьәләләрҙең ҡуйылышыһәм хәл ителеше.Әҫәрҙә ерҙе тәбиғәтте һаҡлау өсөнкөрәш темаһы. Әҫәрҙең теле,художество эшләнеше.

“Ғүмер бер генә” романында заман темаһы һәм экология, ғаилә, мөхәббәт мәсьәләләре. Романдың тел-стиль, художество үҙенсәлектәре.

Хәсән Назар

Хәсән Назарҙың тормошо һәм ижады.

“Сәңгелдәк”, “Әсәйем”, “Атай тауышы”, “Йәшәйем” шиғырҙарында Әсәйҙең бөйөклөгө тураһында шағирҙың уй-фекерҙәрҙең бөйөклөгө.Ил яҙмышы,йәшәү мәғәнәһенең һүрәтләнеүе.

“Таулыҡай “,”Ауылымда”,” Тау шишмәһе”,” Тауҙар” шиғырҙарында тыуған төйәккә,ергә, халыҡҡа һөйөүҙең фәлсәфәүи бирелеүе.

“Шәмсыраҡ “поэмаһында лирик герой. Поэманың композицион,поэтик үҙенсәлектәре.

**11-се синыф**

**Календарь-тематик планлаштырыу(башкорт әҙәбиәте)**

| № | Теманың йөкмәткеһе | Сәғәт | Дата | | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | план | үткәрелде | |
| | | М.Кәрим-5 | | | |
| 1. | Инеш әңгәмә.М.Кәрим тормошо һәм ижад юлы тураһында белешмә.Тәүге әҫәрҙәре.”Яҙғы тауыштар””Тыуған ерҙә”,” Таныш булмаған ҡунаҡ” | 1 | | | |
| 2. | М.Кәрим БВһуғышы осорондағы ижады. | 1 | | | |
| 3. | “Тәҙрәңде ас та”,”Трубка”,”Һаумы тиҙәр гөлдәр”.”Сер” “,Ҡара һыуҙар” поэмалары. | | | | |
| 4. | М.Кәрим “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ  повесы(өҙөк) | 1 | | | |
| 5. | М.Кәрим “Ай тотолған төндә”(өҙөк) | 1 | | | |
| | | Р.Ғарипов-4 | | | |
| 6. | Р.Ғарипов .Тормошюлы.Ижады. Тыуған ил,халыҡ яҙмышы,ил улдары тураһындағы әҫәрҙәре.”Уйҙарым “ҡобайыры,”Аманат”. | 1 | | | |
| 7. | Тәбиғәт(“Болоттар”,”Саған”), ,мөхәббәт (Йүрүҙән,Тәүге һөйөү),фәлсәфәүи (Кәкүк, Ғүмер,Кеше) лирикаһы. | 1 | | | |
| 8. | Табыныу поэмаһы.Видиояҙма тыңлау. | 1 | | | |
| 9. | Көндәлектәренән өҙөктәр менән танышыу. | 1 | | | |
| | | Ә.Хәким-2 | | | |
| 10. | Ә.Хәким.Тормош юлы.Ижады. | 1 | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | “Өйөрмә”әҫәрҙәренә ҡыҫҡаса күҙәтеү. | | | | |
| 11. | “Бәйге” әҫәре(өҙөк). | 1 | | | |
| Ғ.Хөсәйенов-4 | | | | | |
| 12. | Ғ.Хөсәйенов.Әҙиптең тормошо,ижады | 1 | | | |
| 13. | “Ғүмер йомғағы”,”Тамсылар”,”Туған яҡ”,”Туған тел”, | | | | |
| 14. | ”Ырым-йола”,”Мөхәббәт” парсаларында тормош тураһында уйланыуҙар. | 1 | | | |
| 15. | Ғ.Хөсәйенов” Рудасы Исмәғил Тасим улы”. | 1 | | | |
| 16. | “Ҡанлы илле биш” романынан өҙөк. | 1 | | | |
| Р.Бикбаев-3 | | | | | |
| 17. | Р.Бикбаев Тормошо һәм ижады.Фәнни эшмәкәрлеге.”Уралыма “,”Ҡурай”шиғырҙары | 1 | | | |
| 18. | “Хазина” поэмаһы | 1 | | | |
| 19. | “Бикбай менән Бикбай һөйләшеүе “шиғыры,замана,мораль-этик мәсьәләләр | 1 | | | |
| Н.Мусин-4 | | | | | |
| 20. | Н.Мусин.Тормошо,ижады. “Яҙмыш.Булмыш.Тормош” әҫәренә күҙәтеү. | 1 | | | |
| 21. | “Ауылым юлы”повесы | 1 | | | |
| 22. | “Мәңгелек урман “ романынан өҙөк | 1 | | | |
| 23. | “Шайтан ҡуласаһы”повесы | 1 | | | |
| А.Абдуллин-1 | | | | | |
| 24. | А.Абдуллин.Тормошо,ижады .”Ун өсөнсө председатель”пьесаһы | 1 | | | |
| Р.Солтангәрәеев-1 | | | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 25. | Р.СолтангәрәеевТормошо,ижады.Хикәйәләренә күҙәтеү яһау.. | 1 | | | |
| Д.Бүләков-2 | | | | | |
| 26. | Д.Бүләков.Тормошо,ижады.” Килмешәк”(өҙөк) | 1 | | | |
| 27. | “Ғүмер бер генә”романынан өҙөк | 1 | | | |
| Х.Назар-7 | | | | | |
| 28. | Х.Назар.Тормошо,эшмәкәрлеге.Шиғырҙарына күҙәтеү. | 1 | | | |
| 29. | “Шәмсыраҡ” поэмаһы. | 1 | | | |
| 30. | Әҙәби портреттар.<br>Ә Атнабаев.”Замандашым” поэмаһы. | 1 | | | |
| 31. | Т.Ғәниева “Ҡыпсаҡтар “поэмаһы | 1 | | | |
| 32. | Ф.Туғыҙбаева .Лирикаһы,поэмалары. | 1 | | | |
| 33. | .Ә.Әминев “Ҡапҡа” хикәйәһе | 1 | | | |
| 34. | Т.Ғинитуллин” Шағир” | 1 | | | |

## Башҡорт теленән балаларҙың белем һәм күнекмәләрен баһалау нормалары

Рус телле мәктәптәрҙә уҡыусыларҙың белем һәм күнекмәләрен баһалау маҡсатында, башланғыс һәм юғары синыфтар өсөн, махсус нормалар билдәләнә. Был нормалар саф башҡорт мәктәптөре йәки башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүсе мәктәптөр өсөн билдәләнгән нормаларҙан бер ни тиклем айырыла. Ҡулланыу өсөн уңайлы тип иҫәпләп, бөтә нормаларҙы бер урынға туплау урынлы тип табылды.

### 1. Балаларҙың уҡыу һәләтлектәрен баһалау

Уҡыусыларҙың башҡорт телендә уҡыуын, яуаптарын баһалағанда, уларҙың тәҡдим ителә торған тексты аңлы һәм тасуири уҡыуы, йөкмәткеһен тейешле кимәлдә үҙләштереүе, кәрәкле кимәлдә һөйләй алыуы иҫәпкә алына.

Йыл аҙағына уҡыу тиҙлеге минутына түбәндәгесә билдәләнә:

| синыф | Һүҙ | Билдә | Эстән уҡыу |
|---|---|---|---|
| 10-сы | 170 - 210 | 370 - 400 | 250 - 300 |
| 11-се | 180 - 210 | 380 - 400 | 260 - 300 |

Уҡыу техникаһы тураһында һөйләгәндә, шуны иҫтә тоторға кәрәк:

1. Кешегә, ғәҙәттә, күберәк эстән уҡырға тура килә. Шуға күрә дәрестәрҙә балаларҙы бәләкәй синыфтарҙа ҡысҡырып укырға өйрәтеү норма һанала.

Эш методикаһын ошондайыраҡ итеп ойоштороу кәңәш ителә: баһаға уҡыу өсөн, һәр уҡыусыға айырым текст әҙерләнә, әммә шиғри әҫәрҙәр алыу уңайлы түгел. Текстар хикәйәләү формаһында, йөкмәткеһе тамамланған, ваҡиғалар һүрәтләнеше эҙмә-эҙлекле булырға тейеш. Текстағы һүҙҙәр, билдәләр алдан һанап ҡуйыла. Бала ошо тексты күпме ваҡытта уҡый, шунан сығып уның бер минутта уртаса нисә һүҙ уҡыуы асыҡлана.

### 2. Яҙма эштәрҙең күләме һәм уларҙы баһалау нормалары

Уҡытыу рус телендә барған мәктәптәрҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә яҙма эштәрҙең төрлө формалары ҡулланыла. Уларҙың ҡайһы берҙәре башланғыс синыфтарҙа, ҡайһылары юғары синыфтарҙа күберәк һәм өйрәтеү маҡсатында үткәрелә. Шулай уҡ яҙма эштәр (бигерәк тә юғары синыфтарҙа) уҡыусыларҙың белем Һәм күнекмәләрен тикшереү өсөн дә файҙаланыла. Яҙма эштәрҙең рус телле мәктәптәрҙә киң ҡулланыла торған түбәндәге төрҙәрен күрһәтергә мөмкин:

—һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе күсереп яҙыу;
—һүҙлек диктанттары;
—ғәҙәти диктанттар;
—һорауҙарға яуаптар;
—тестарға яуаптар, яҙыу;
—изложениелар;
—иншалар.

Әйтергә кәрәк, һаналған яҙма эштәрҙе башланғыс синыфтарҙа элементар характерҙа, өйрәтеү маҡсатында һәм ныҡлы әҙерлектән һуң ғына яҙҙырыу кәңәш ителә. Әҙерлек эштәре төрлөсә булырға мөмкин: һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе яҙыр алдынан Бер нисә тапҡыр телдән әйттереү, ниндәй хәрефтәр яҙылыуын анализлау, һүҙҙәрҙе һауала (таҡтала) яҙып ҡарау, таҡтала яҙылғандарҙы күмәкләп тикшереү, хаталарын төҙәтеү һ.б. Фәҡәт ошондай әҙерлек эштәре үткәрелгәндән һуң ғына, эштәр аҡҡа яҙыла. Дөрөҫ, әҙерлек эштәрен уҡытыусы, үҙ уҡыусыларының әҙерлек, телде белеү кимәленән сығып, үҙенсә хәл итә ала.

Юғары синыфтарға күсә барған һайын, яҙма эштәрҙе яҙҙырыу методикаһы ҡатмарлана, йәғни, башҡорт мәктәптәрендә ҡулланыла торған алымдарға яҡыная бара. Был синыфтарҙа контроль характерындағы яҙма эштәргә өҫтөнлөк бирелә.

—Өйрәтеү характерындағы яҙма эштәр, һүҙлек диктанттары был таблицаға инмәй, улар ғәҙәттәге дәрестәрҙә үткәрелә. Уларҙың йышлығын, күләмен уҡытыусы үҙе билдәләй.

—Күсереп яҙыу өсөн тәҡдим ителә торған текст күләме контроль диктант тексы күләменә тап килә. Ғөмүмән, һәр дәрестәге яҙыу эштәре лә шул синыфтағы контроль диктант тексы күләменә тап килергә тейеш.

—Контроль характерҙағы яҙма эштәр текстарының күләме түбәндәгесә билдәләнә:

| Эш төрҙәре | кластар | |
|---|---|---|
| | 10 | 11 |
| Һүҙлек диктанты | 24-27 | 27-30 |
| Диктант | 100-110 | 110-120 |
| Изложение | 90-100 | 100-110 |

Был ваҡыт эсендә уҡыусылар ижекләп, һүҙләп күсереп яҙа, диктант, изложение, инша кеүек яҙма эштәрҙе башҡара. Ваҡытты шунан да күберәк биреү кәңәш ителмәй. Әммә (конкрет ситуацияға ҡарап, яҙма эштәр башҡарыуға ваҡытты уҡытыусы 3-5 минутҡа оҙайта йәки ҡыҫҡарта ала.

Юғары синыфтарҙа яҙма эштәрҙе үткәргәндә, балаларҙың уҡыу тиҙлеге лә яҙма эштәрҙе үткәреү ваҡыты ла конкрет ситуацияға ҡарап билдәләнә.

Урыҫ телле мәктәптәрҙә башҡорт теленән ҡуйыла торған баһалар башҡа предмет буйынса алған баһаларҙан кәм булырға тейеш түгел. Шуға ла бындай мәктәптәрҙә башҡорттеленән яҙма эштәр ныҡлы әҙерлек үткәргәндән һуң ғына башҡарыла.

Баһалар, нигеҙҙә, уҡыусыларҙы башҡорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу, дәртләндереү маҡсаты менән ҡуйыла.

Шик юҡ, мәктәптә уҡытыла торған башҡа предметтарҙы өйрәнгәндә лә башҡорт теленә мөрәжәғәт итеү уны үҙләштереүгә ҡыҙыҡһыныу уята.

Шулай итеп, башҡорт телендә һөйләшеү, уҡыу, яҙыу күнекмәләрен үҙләштереү балаларға юғары кластарҙа белем алыуға нигеҙ әҙерләй, уларға республика, уның тәбиғәте, халҡы, сәнғәте, әҙәбиәте тураһында күберәк информация алырға ярҙам итәсәк. Юғары синыфтарҙа бындай эштәр тағы ла тәрәнерәк, киңрәк итеп үткәрелә. Былар бөтәһе лә республика илһөйәрҙәрен, юғары әхләкле шәхестәр тәрбиәләүгә ҙур мөмкинлек аса.

**Яҙма эштәрҙе баһалау нормалары.**

Диктанттарҙы баһалау.

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәр өсөн әҙерләнгән диктанттар тексына бөтә үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙҙәр инә.Грамматик эштәр өҫтәп

бирелгәндә,диктант текстары бер аҙ ҡыҫҡартыла.Орфограммаларҙың һәм пунктограммаларҙың дөйөм һаны түбәндәгеләрҙән артмаҫҡа тейеш:III- 5/2 , IV-6/2 , V -8/3 VI-10/3 , VII -12/6, VIII-14/6, IX-16/6

Диктантты баһалағанда төҙәтелә,әммә иҫәпкә алынмай торған хаталар:

1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәләргә яҙылыштар;
2) әле үтелмәгән ҡағиҙәләргә яһалған хаталар;
3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуация;
4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу.

Тупаҫ булмаған хаталар:

1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;
2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;
3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;
4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.

Диктант бер генә билдә менән баһалана.

«5» - хатаһыҙ йәки тупаҫ булмаған 1орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә: 1/0, 1/2, 0/2.

«4» - 2 орфографик, 2 пунктуацион , 1орфографик, 3 пунктуацион: 2/2, 1/3, 2/3,3/3, 1/5, 0/7.

«3» - 4 орфографик, 4 пунктуацион, 3 орфографик, 5 пунктуацион: 4/4, 3/5, 3/6,

өс бер типтағы хата ебәрелһә, 6/6 хаталы эшкә лә өс ҡуйыла.

«2» - 9 орфографик, 9 пунктуацион: 8/10, 9/9.

«1» - уҡытыусы ҡарамағында.

**Диктант текстары.**

**10-сы синыф**

Яҙ һулышы.

Ҡояш көндән-көн нығыраҡ йылыта ҡар ирей. Өй түбәләренән, аҙбар ҡыйыҡтарынан тамсылар тама. Тау биттәре асылды. Тәүге бәләкәй йырғанаҡтар күренде.

Тәбиғәт көндән-көн йәнләнә бара. Соҡорҙарҙан шаулап ҡар һыуҙары аға. Тирә-яҡҡа тупраҡ еҫе тарала. Саф һауа тамаҡты ҡытыҡлай. Тау битләүҙәрендә үләндәр йәшәрә. Тәүге сәскәләр ҡалҡып сыҡты. Сыйырсыҡтар һәм һабан турғайҙары һайрай. Яҙ көнө бөтә нәмә яңынан йәшәй башлаған кеүек була.

Һәр һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен табып, аҫтына һыҙығыҙ.

Ҡурай.

Ҡурай – сатыр сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған күп йыллыҡ үҫемлек. Белмәгән ҡайһы бер кешеләр ҡурайҙы ҡамыш тип атап ныҡ яңылыша. Ҡурайҙың һабаҡтары ҡырлы-ҡырлы. Ҡурайҙың бейеклеге 120-170 см. Ҡурай Урал тауының төньяғынан көньяҡ сиктәренә тиклем үҫә. Әйтергә кәрәк, ҡурай, Уралдан тыш, Алтай, Саян тауҙарында һәм Яҡут-Сахала үҫә, ә музыка ҡоралы булараҡ тик башҡорттарҙа ғына таралған. Был, әлбиттә, быуаттар төпкөлөндә ҡалған ғәжәп бер сер.

Ҡурай ҡайын урманы һәм аралаш урмандарҙа ҡуйы үлән араһында үҫә. Бигерәк тә дымға байыраҡ үҙән урындарҙы хуп күрә. Ундай урындарҙа ҡурай йоҡараҡ, ә кипкәс яңғырауыҡлыраҡ була. (100 һүҙ.) (С. Йәнтүрин.)

1. Яңғыҙлыҡ исемдәр аҫтына һыҙығыҙ.
2. Бер составлы һөйләмдәрҙең төрөн билдәләгеҙ.

**11-се синыф**

Башҡорт егете Шакирйән.

Батырҙарҙың-батыры тигән даны таралған һәм рус фамилияһы менән энциклопедияларға ингән Александр Матросовтың башҡорт егете Шакирйән Юныс улы Мөхәмәтйәнов булыуы яңыраҡ ҡына тулыһынса асыҡланды.

Шакирйән Юныс улы Мөхәмәтйәнов Башҡортостан Республикаһының Учалы районы Ҡунаҡбай ауылында тыуа.Ул 1934 йылда уҡ тыуған ауылынан сығып китә, сиғандар, моряктар араһында йөрөй. Унан һуң Ульяновск

өлкәһенең Димитровград балалар йортона барып эләгә. Һуңынан Һамар, Һарытау ҡалаларына барып юлыға. Унда Саша, паспорты булмағанлыҡтан, ҡулға алына һәм Өфө балалар хеҙмәт колонияһына ебәрелә, ә 1942 йылдың октябрендә фронтҡа китә.

Балалар йортонда һәм колонияла йәшәгән сағында Шакирйән өс тапҡыр тыуған ауылына ҡайтып китә. Һуңғы тапҡыр килгәнендә ул атаһына: "Үлеп ҡалһам, мине Александр Матросов исеме менән эҙләрһегеҙ", тип әйтә. (109 һүҙ.) (Р. Насиров.)

1. Беренсе һөйләмгә синатаксик анализ яһа.

Баймаҡ ҡалаһының башы.

Таналыҡ буйында алтын эҙләү эштәрен үткән быуаттың урталарында Роттемунд тигән граф башлап ебәргән. Баймаҡ ҡалаһынан үрҙәрәк Таналыҡ үҙәнендә Граф күле тигән һыуһаҡлағыс ана шунан ҡалған да инде.

Таналыҡ үҙәнендәге һәм ҡойған бәләкәй йылғалар буйындағы һибелмә алтын ятҡылыҡтары төньяҡ Иҫән ауылы тирәһенән башлана ла көньяҡҡа табан Рафиҡ ауылына тиклем һуҙыла. Ул ҙур ғына майҙанда алтынға бай урын- Мерәҫ ауылы менән Таналыҡ ауылы араһында була. Урын Таналыҡ алтын ятҡылығы тип атап йөрөтөлгән. Уның Баймаҡтан түбәнгә лә һуҙылып төшөүен иҫәпкә алһаҡ, Таналыҡ ятҡылығының оҙонлоғо 12 саҡрым самаһы булыр. Шуныһы ҡыҙыҡлы, хәҙерге Баймаҡ быуаһы аҫтында хәҙер ҙә һибелмә алтын запасы һаҡланып ҡалыуы асыҡланды.

Революцияға тиклем Таналыҡтан Әпек, Ольховка, Күҙәйылға һымаҡ бәләкәйерәк ятҡылыҡтарҙан иң кәмендә өс тонна алтын сығарылған.(120 һүҙ.) (Б. Мәһәҙиев)

1. Һуңғы һөйләмгә синтаксик анализ яһағыҙ.
2. Текста яңғыҙлыҡ исемдәр аҫтында һыҙығыҙ.